
әби тел булә милләтемде.

# 100 йыл ваҡыт үтеп китте,һаман да ошо васыятты тормошҡа ашыра алмайбыҙ.

- Һәр халыҡтың иң ҡәҙерле, уның - Тыуған ере, тыуған теле.
- Башҡорт халҡының төйәге – Башҡортостан. Халҡыбыҙ, ошо Башҡорт иле өсөн көрәшкән, ҡан ҡойған, киләсәген ҡайғыртҡан.
- Халҡыбыҙҙың күбеһе ауылдарҙа йәшәй.Үҙегеҙ беләһегеҙ ауылдарҙа эш урындары юҡ, Ир – егеттәребеҙ айҙар , йылдар буйы буйы ҡайтмай, ғәиләләренән айырылып ситтә эшләй. Ошо сәбәп менән күп кенә ғәиләләрҙә балалар атайһыҙ үҫә.
- Республикабыҙҙың ҡалаларында милләтебеҙ өсөн эш табыуы бик ауыр. Өҫтә ултырған етәкселәр эргә - тирәһенә туған – тыумасалары менән уратып алынған.
- Телебеҙ, Республика ла дәүләт теле булыуға ҡарамаҫтан , мәктәптәрҙә уҡытыу ҡыҫҡартылды. Милләтебеҙҙе ике яҡтан ҡыҫыуҙар күҙгә ташлана. Башҡорт интеллигенцияһы ҙур баҫым кисерә, күп ғалимдәребеҙ, белгестәребеҙ эштәренән бушатылды. Мәғлүм булыуынса, беҙҙең башҡорт активистәре төрлө ҡурҡытыу, яла яғыуҙарға дусар була. Халҡыбыҙ бик ауыр тормош кисерә.
- Мин, минең ҡайһы бер дуҫтарым , Башҡортостанда барған сәйәсәтте аңлай алмай. Күптәрҙе был һорау борсай. Республика ла йәшәгән башҡа халыҡтарҙың Конституция хоҡуҡтары боҙолмай, ә аҫаба халыҡтың мәнфәғәтен яҡлап, уның
- киләсәген ҡайғыртҡан кешеләрҙе, нисек Хөкөмәтебеҙгә ҡарышы эш алып бара тип әйтергә була?!



Башҡорт иле өсөн көрәшкән, ҡан ҡойған, киләсәген ҡайғыртҡан

- Ауыр – ҡатмарлы осорҙа йәшәйбеҙ.
- Яҡын арала, Башҡортостаныбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәк яҙмышы хәл ителәсәк. Мөмкинлектәр бар, тик беҙгә тәүҙә халҡыбыҙҙы берләштерергә кәрәк. Алдыбыҙҙа ниндәй генә ауырлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, эшләргә лә эшләргә. Аҙаҡ үкенерлек булмаһын. Бөтәһелә үҙебеҙҙең ҡулыбыҙҙа.
- Башҡортостан Республикаһының автономия яулауына 100 йыл.
- Ошо осорҙа халҡыбыҙ ниндәй генә үҙгәрештәр, ауырлыҡтар,шатлыҡтар, борсолоуҙар, кәмһетелеүҙәр кисермәне. Шулай булыуға ҡарамаҫтан , башҡорттар башҡа халыҡтар менән тиң йәшәүен дауам итә.
- Бигерәктә, әлеге ваҡытта Башҡорт халҡының һан яғынан кәмеүе тойола. Ысын- барлыҡта башҡорт халҡы бер миллиондан артмайҙыр тип әйтһәмдә хата булмаҫ. Кәмеүебеҙҙең сәбәбтәре күп – ҡатнаш ғәйләләрҙә бик һирәктәр балаларын башҡорт тип яҙҙырта. Ҡыҙҙарыбыҙ сит милләткә кейәүгә сығалар, егеттәребеҙ ауылда буйҙаҡ йөрөйҙәр. Халҡыбыҙ көслө ассимиляцияға дусар.
- Төньяҡ -көньсығыш, көнбайыш райондарҙа, элекке башҡорттар йәшәгән ауылдарҙағы халыҡтың милләтенә ҡарамай ,,башҡорт,,-тип яҙалар. Был үҙебеҙҙе үҙебеҙ алдау.
- Дөрөҫөн әйткәндә, элекке башҡорт ауылы тип һаналған ауылдарҙа башҡорттар йәшәймәй, ысынбарлыҡта, уларҙа йәшәгән башҡорттар татар милләтенә күсеп бөтөп бара. Хәҙер дүртенсе быуын балалар тыуа, улар үҙҙәрен татар милләтенән тип һанаясаҡтар.
- Күпме йылдар үҙ-үҙебеҙҙе алдайбыҙ , тағы ла күпме алдарбыҙ?! Тәрих мәғлүмәттәренә ҡарап үҙебеҙҙе – үҙебеҙ тынысландырабыҙ. Ысынлап та ,был яҡтарҙа башҡорттар күп йәшәгән, ысынбарлыҡты тарих биттәре лә иҫбатлай. Башҡорттарҙың кәмеүе тураһындағы мәғлүмәт хаҡында дөрөҫөн әйтергә ҡурҡаларҙыр. Шулай түгелме?
- Беҙгә һәр ваҡыт, ошоға көндәргә тиклем, әйтеп килделәр – Республикабыҙҙың төнъяҡ көнбайышында йәшәгән халҡыбыҙҙың аралашыу теле башҡорт теленең бер диалекты тип. Шулай булғас, ни өсөн беҙҙең унда йәшәгән башҡорттар диалектында гәзит-журналдар сығарылмай, мәктәптәрҙә уҡытылмай?

- Район газиттәре лә унда татар телендә сыға , әгәрҙә беҙ ул яҡтарҙа башҡорттар йәшәй тип һанайбыҙ икән , ниңә башҡорт телендә сыға тип яҙмайбыҙ. Йә, булмаһа , төнъяҡ башҡорттары диалектында сыға –тип.
- Ошо тел арҡаһында Башҡортостаныбыҙҙы икегә бүлдек ; татар һәм башҡорт районДарына.
- Күп тә ваҡыт ҡалманы, референдум үткәреп төньяҡ көньсығыш , төньяҡ көнбайыш районДарын Башҡортостандан айырып , Татарстанға ҡушырға һәм башҡорт халҡының тәрихен үҙгәртеп яҙырға ғына ҡалды.
- Был яҡтарҙа үҙҙәрен башҡортлоғонан баш тармағандар күп. Шәжәрәләр төҙөп, күп кенә милләттәштәребеҙ үҙ тамырҙарын башҡорт булыуҙарын асыҡланы һәм асылына кире ҡайты.
- Республикабыҙҙың төньяҡ районДарындағы башҡорт тамырлы милләттәштәребеҙҙең ораның ишетмәйбеҙ, ишетһәк тә ишетмәмешкә һалышабыҙ. Улар үҙҙәренең уй-фекерҙәрен Башҡортостан Хөкөмәтенә , ғәлимдәренә еткерергә тырыша, был яҡтағы башҡорттарҙы ситкә этәрмәүҙәрҙе һорап, әсенеп яҙалар.
- Ринат Камалдың ,, Фән, әҙәби тел һаман аяҡ салармы?,, -тигән яҙмаһын уҡыным, уның яҙмаһын күптәр яҡлап сыҡты.
- Был мәсьәлә буйынса түңәрәк өҫтәлдәр ойошторол , уртаға һалып бәхәстәр ойошторолдо, тик, алға китеш юҡ. Белмәйем, кемдән ҡурҡабыҙ ? Республикабыҙ эсендә , үҙебеҙҙең милләтәштәребеҙҙе яҡлай алмайбыҙ, ә республиканан ситтә йәшәгән милләтәштәребеҙ тураһында әйтеп тораһы ла түгел.
- 1920 йылдың 28 мартында,Башҡортостан хөкөмәте Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә башҡорт һәм рус теле дәүләт теле тип иглан ителә. 1921 йылда 9 апрелендә Башҡорт әҙәби теленең нигеҙе итеп ҡыуаҡан , юрматы диалектың алалар. Бәләкәй Башҡортостан автономияһы ойошторолған биләмәләрҙә , әлбиттә ҡыуаҡан диалегендә һөйләшкән башҡорттар күпселекте тәшкил итә, шунын өсөндә был диалект башҡорт халҡының әҙәби теле итеп билдәләнә . Юрматы диалеге үҫеш ала алмай. Оло Башҡортостан төҙөлгәндән һуң, ҡыуаҡан диалекты аҙсылыҡҡа ҡала. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең республика етәкселәре, интеллигенцияһы, галимдары дәүләт һәм әҙәби телен яңынан ҡарау мәсьәләһенә ихтибар итмәй

• Башҡорт иле өсөн көрәшкән, ҡан ҡойған, киләсәген ҡайғыртҡан.



- 1950 йылда Башҡортостанда әҙәби тел мәсьәләһен, йәнә күтәреп сығалар, тик был эш аҙағына еткерелмәй.
- 1925,1937,1978, 1993 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының -Төп законы яңынан ҡарала һәм үҙгәрештәр индерелә. Тел мәсьәләһенә килгәндә - Башҡортостанда рус теле, башҡорт теле дәүләт теле булып һаҡлана . Тик , Башҡортостанда әҙәби теле үҙгәрешһеҙ ҡала.
- Ҡыуаҡан диалекты Оло Башҡортостанда башҡа диалекта һөйләшкән башҡорттарға үтеп инмәне, башҡорт диалектәрен берләштереү теленә әүерелә алмайны. Тик эргә -тирәләге ауыл, райондарға ғына тәҫир итә алды.
- Был диалект, халҡыбыҙҙы берләштерә алмағаның белә тороп, ниңә ошо көндәргә тиклем һуҙылды, ошо сәбәп ле меңәрләгән милләттәштәребеҙҙе юғалттыҡ, тағы ла алдағы көндәрҙә күпме юғалтырбыҙ…
- Элеге ҡыуаҡан диалекты ла бик күп үҙгәрештәр кисерә. Татар теленән алыҫыраҡ булһын өсөн, нисек теләнеләр шулай үҙгәрттеләр. Күп һүҙҙәрҙе боҙоп ,,Башҡорт,, телен барлыҡҡа килтерҙеләр.
- Сөләймән –Һөләймән
- Солдат – һалдат һәм башҡа һүҙҙәр.Күп кенә башҡорттарҙың һөйләшеүенә ихтибар иткәндә, күбеһе «лар» менән һөйләшәләр.
- Төньяҡ-көнсығыш, Көнбайыш башҡорттары ,шулай уҡ Барда , Силәбе өлкәләрендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең күбеһе элекке ата-бабайҙарыбыҙҙың боронғо диалегендә һөйләшә. Ни өсөн боронғо башҡорт теле - теймен, сөнки архив документтәрен асып ҡараһаң, унда Барда башҡорттары диалегенә оҡшаш телдә яҙылған.
- Граждандар һуғышы осоронда сит илдәргә сығып, ғүмер иткән милләттәштәребеҙ һөйләшенә ихтибар иткәндә лә, уларҙа төнъяҡ башҡорттар диалегендә һөйләшеүе сағыла.

- Яңыраҡ БСТ –ла Башҡортостанға ,Япониянан килгән яҡташтарыбыҙ осорашыуын күрһәтелде. Ихтибар иткәнһегеҙҙер уларҙын аралашыу теленә. Сит илдәрҙә йәшәгән милләтәштәребеҙ ҙә ысын башҡорт теле һаҡланып ҡалған. Сит илдә йәшәп, ата -әсә телен һаҡлап ҡалыуы һайран ҡалдыра.
- Татар теле беҙҙең башҡорт теленә яҡынлаша, бының бер ниндәй ҙә ҡурҡынысы юҡ: бер яҡтан һүҙҙәрҙең айырмаһы ҙур, икенсе яҡтан, әгәрҙә һин башҡорт икәнһең , ниндәй генә диалекта һөйләшһәң дә башҡорт булып ҡалырға тейешһең. Ҡыҙғаныска ҡарышы, тормошта улай түгел шул.
- ,,С,, , ,, ч,, хәрефе һөйләшебеҙҙә йыш осорай икән, беҙ уларҙы ,,татар,, тип ситкә этәрәбеҙ.
- Оҙаҡ йылдар Башҡортостандың төнъяғында йәшәгән башҡорттарға ихтибар етмәй. Бындай ихтибарһыҙлыҡ күреше Татарстан ихтибарына ҡулай булды. Тиҙ - арала татар дәреслектәрен мәктәптәргә таратып, татар теле уҡыта башланылар. Эгәр ҙә беҙ ул яҡтарҙа үҙсәнекле татар теленә яҡын башҡорт теле икән, ниңә татар теле уҡытырға рөхсәт бирелә икән? Беҙҙең Мәғәриф министрлығы ҡайҙа ҡарай?
- Башҡорт Хөкөмәтте, төньяҡ башҡорттарының үҙ ҡулы, үҙ теләге менән күреше татар дуҫтарға халҡыбыҙҙың бер өлөшөн ,,бүләк,, итте. Нимә эшләһәғеҙҙә эшләгеҙ, татар итһәгеҙ, татар итегеҙ, тигән кеүек.
- Тел бер урында тормай, ул төрлө үҙгәрештәр кисереп йәшәй. Элеге әҙәби телебеҙ үҙгәрҙе, күп һүҙҙәребеҙ юғалды, Бындай күренеш тик беҙҙең башҡорт теленә генә түгел, ә рус теленә лә хас. шунай үҡ хәл. Был тура ла рус ғәлимдәренән ишетергә була.

- Башҡорт телен  кире ҡайтарырға һәм заман талаптарына тура килтергә тейешбеҙ. Уны яңыртыу эшендә төньяҡ көнбайыш, төньяҡ көнсығыш, Курған, Силәбе, һарытау, Барда ,Пермь башҡорттары  белғестәре менән берлектә эшләү ыңғай һөҙөмтәләр бирер ине. Уртаҡ башҡорт әҙәби тел барлыҡҡа килтереү  телебеҙҙе байытасаҡ, халҡыбыҙҙы берләштерәсәк.
- Шаһит Хоҙайбирҙинден 1924 йылда  яҙған ,,Нисек яҙырға ?,, тигән мәкәләһен күҙ уңында тотар кәрәк. Ул, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килгәс әҙәби телде киренән ҡарау  тураһында фекер йөрөткән.
- *,, Беҙ үҙебеҙгә шундай телде алырға тейешбеҙ, беҙҙең тормошҡа яҡынyраҡ булғаның. Минеңсә, беҙҙең тормошҡа  ҡыпсаҡ, юрматы, ялан, үсәргән, һаҡмар, пермь башҡорттарының  һөйләшкән телдәре яҡын. Бына ошо телдәрҙе тиҙерәк дәүләт теле итеп  алыр кәрәк ,,*- тип яҙа.  Ул алдан  күрә белгән, ошо телдәр генә халҡыбыҙҙы берләштерәсәген.
- 100 йыл ваҡыт үтеп китте, һаманда ошо васыятты тормошҡа ашыра алмайбыҙ.
- Башҡортостандың 101 йылығын  халҡыбыҙҙы бергә туплауҙан,  яңы әҙәби тел менән ҡарышылау бик хәйерле булар ине.
- Беҙ, төнъяҡ көнъбайышта йәшәгән халыҡтың  диалектың башҡорт теленең бер төрө  тип һанайбыҙ икән, быңдағы милләттәштәребеҙҙең теле / урындағы һөйләшеү диалекты/ Башҡортостанда  дәүләт теле рәтенә керә түгелме?!
- Шулай булғас, ни өсөн беҙҙең Башҡортостан Хөкөмәтте, Бөтә донъя башҡорттары королтайы ундағы милләттәштәребеҙгә ярҙам ҡулы һуҙмай?
- Театр эшмәкәрҙәре, яҙыусылар ул яҡтарға һирәк йөрөй, йырсыларбыҙ  ул  яҡтағы районларҙы урап үтә. Радио тыңлағанда  ла  артистарҙың реклама роликтарында  тик Баймак, Ейәнсура,Эбйәлил , Бөрйән районларына йөрөгәндәрен  йышыраҡ ишетәһең.   Э ниңә , Саҡмағош, Дүртөйлө, Аскын, Туймазы, Дыуан , Мишкә, Асҡын һәм башҡа  районларға гостролдәргә сыҡмайҙар, әлегә  был яҡтарға барыр өсөн дәүләт сиген  үтер кәрәкмәй. БСТ-ла, радиола ла  яңылыҡтарҙа  көнъяҡ  районларҙы йыш  күрһәтәләр һәм  улар хаҡында һөйләйҙәр.
- Элеге ваҡытта ла был эштәрҙе яйлап ыңғай яҡҡа бора башлау кәрәктер,  республика ғәзит – журналдар һәм башҡа яҙмалар ярҙам итәр ине тип уйлайым.

Ерҙәребеҙгә, урмандарыбыҙға, ҡаҙылма байлыҡтарыбыҙға хужа түгелбеҙ.



- ,, Башҡортостан,, гәзитендә бер бит асыр кәрәк, был биттә төнъяҡ көнсығыш башҡорттары телендә мәҡәләләр баҫтырыу, шулай үк үҙаллы гәзит сығарыуҙы күҙ уңында тотоу ҙа мөһим. Шулай республикабыҙҙың төп гәзите- ,,Башҡортостан,, да боронғо башҡорт телен белгән белгес штаты булдырыуҙы һорарға кәрәк.
- Башҡортостаныбыҙға көслө елдәр иҫә, был елдәр тыуған республикабыҙҙы туҙҙырыуы ла ихтимал. Элеге мәлдә, Башҡортостан һәм башҡа милли республикаларҙың статусы өлкәләр менән тигеҙләнде.
- 1990 йылдың 11 октябрҙа Башҡорт АССР дәүләт суверентты декларацияһын иглан итте, Тик, был декларациялағы хоҡуҡтарыбыҙ сәйәси һәм иҡтисад яҡтанда күҙәтелмәй, төҙөлгән килешеүҙәр ҙә хоҡуҡтарыбыҙ яйлап ғәмәлдән сығарылды.
- Еребеҙгә, урмандарыбыҙға, ҡаҙылма байлыҡтарыбыҙға хужа түгелбеҙ. Рәсәйҙә федерация ҡағыҙ биттәрендә бар, ә тормошта федерализм юҡ. Ысын федерализмда хоҡуҡлы, үҙ ерендә үҙе хәкимлек иткән республикалар булырға тейеш. Шуның өсөн дә Башҡортостан Республикаһына яулап алынған автономия һәм суверенитет хоҡуҡтарыбыҙҙы кире ҡайтарайыҡ, бигерәктә халҡыбыҙға иҡтисади үҙаллылыҡ кәрәк.
- Башҡортостанды автономиялы республика тип атау кәрәктер тип- уйлайым.
- Башҡорт халҡы көслө, сыҙамлы халыҡ. Эгәрҙә тыуған төйәгебеҙҙе һаҡлап ҡалайыҡ тиһәк, халҡыбыҙҙы туплар кәрәк. Рәсәй киңлегендә беренсе булып автономия яулаған, ата-бабайҙарыбыҙ эшләп еткемәгән эштәрҙе урынына еткереп башҡарып ҡуйайыҡ, милли нигеҙгә һәм заман талаптарына яраҡлаштырайыҡ.
- Булат Яныбаев
- Рәсәй Федерацияһы газ сәнәғәтенең маҡтаулы хеҙмәткәре.
- Белорет районы Башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ағзаһы